Һаумыһығыҙ хөрмәтле  жюри ағзалары, бәйгелә ҡатнашыусылар. Мин, Туймазы педагогия колледжының V курс студенты Камалтдинова Гөлназ Вил ҡыҙы, һеҙҙең иғтибарығыҙға « Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» роман-эпопеяһында тарихи ваҡиғаларҙың геройҙар яҙмышында сағылышы» исемле  темаға яҙылған эшемде тәҡдим итәм. Ғилми етәксем башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы.

Егерменсе быуат быуат башында бөтә төрки донъяһында иң уҡымышлы кешеләрҙең береһе Риза Фәхретдинов бер хеҙмәтендә «Донъяла йәшәргә һәм башҡалар рәтендә ғүмер һөрөргә теләгән милләт үҙенең үткән көндәрен белһен һәм үҙ тарихы менән дуҫ булһын» тип яҙып ҡалдырған. Бына инде беҙ XXI быуатҡа аяҡ баҫтыҡ. Ә үткән шаулы быуат тарихта ғына ҡалды. Шулай ҙа ошо 100  йыл эсендә ниндәй генә ваҡиғалар булмаған. Был тетрәндергес ваҡиғалар кешеләр яҙмышына, йәшәйешенә, уйҙарына, маҡсаттарына ҙур йоғонто яһаған. Билдәле башҡорт прозаигы Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй» роман-эпопеяһын уҡығас, ошо фекерҙең раҫ икәненә тағы ла нығыраҡ инандыҡ. Роман хаЗында Рафаэль А8на7олов былай ти: ««Бөйрәкәй» роман-эпопеяһының көсөн мин нәмәлә күрәм? Әлбиттә, кеше хәтеренә үрелеп kалыр образдарҙа,кеше күңелендә баҙлап яныр рухи осkондалыр. Әҫәр донъяһындағы һәр образ миңә яkын, унан һирпелгән ялkын да күңел донъямды нурлай һымаk.» Ысынлап та, яҙыусы тарафынан тыуҙырылған геройҙар ҡыҙыҡлы һәм етди уйланылған. Ирекһеҙҙән уҡыу барышында улар менән йәшәгәндәй, көрәшкәндәй, хис-тойғоларын йөрәгеңдән үткәреү тояһың.Беҙҙеңсә, башҡорт әҙәбиәтенең портреттар галереяһы тағын да  сағыу көслө характерлы образдар менән байыны. Улар - XX быуат ваҡиғаларында ҡайнаған Т.Ғарипованың «Бөйрәкәй» романы геройҙары.Ошоларҙан сығып, был романда үткән быуат ваҡиғаларының геройҙар  яҙмышына,  уларҙың шәхси үҫешенә йоғонто яһауын  өйрәнеүҙе актуаль тип таптыҡ һәм роман геройҙары яҙмышында башҡорт  халҡының бер быуатлыҡ тарихы сағылғанын иҫбатлауҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Эштең маҡсатынан сығып түбәндәге **бурыстарҙы**  билдәләнек:

- «Бөйрәкәй» романының йөкмәткеһен үҙләштереү, геройҙарға ҡылыҡһырлама биреү

- романда геройҙар яҙмышының ил яҙмышы менән тығыҙ бәйләнештә һүрәтләнеүен күрһәтеү

- яҙыусының әҫәрендә ауыр тормош шарттарында бирешмәгән, кешелек сифаттарын юғалтмаған сағыу образдар тыуҙырыуын иҫбатлау.

**Объекты** Таңсулпан Ғарипованың « Бөйрәкәй» роман-эпопеяһы.

**Предметы** «Бөйрәкәй» роман-эпопеяһының геройҙары.

«Был китапҡа тотош быуат һыйған. Ниндәйҙер мөғжизә менән тарих китаптары юҡҡа сыҡһа, Таңсулпан Ғарипованың роман-эпопеяһы буйынса егерменсе быуатты ҡайтанан тергеҙеп булыр ине » - тип яҙа Рәйес Түләк авторҙың «Бөйрәкәй» пенталогияһы хаҡында.Әҫәрҙә башҡорт халҡының билдәле бер осорҙа кисергән ауыр хәле, йәшәү рәүеше тасуир ителә һәм Тирәкле ауылында барған хәл-ваҡиғалар аша дөйөмләштерелә. Егерменсе быуат дауамындағы төрлө социаль катаклизмдар әҙәмдәр яҙмышын ни ҡәҙәрле аяуһыҙ ойпалай! Роман геройҙары менән танышыу аша ирекһеҙҙән шундай фекергә киләһең. Ә “Бөйрәкәй” романында геройҙар байтаҡ ҡына. Автор тарафынан тыуҙырылған һәр образ үҙенсәлекле, уларҙың һәр кемеһенең тәҡдиренә яҙғаны, образлы фекерләү менән үрелеп, уҡыусыны һәр саҡ көсөргәнештә тота. Ваҡиғалар төрлө осорҙа барһа ла, геройҙарҙың характерҙары, уларҙың тормошҡа ҡарашы уҡыусыға аңлайышлы, уйландырыусан.

Тәүге бүлегендә граждандар һуғышына бәйле ваҡиғалар һүрәтләнгән. Был кешеләрҙең һуғышҡа бәйле бәрелештәрҙең кеше яҙмышына тәьҫир итеүе төп героиня Барсынбикә аша күрһәтелә. Рәсәйҙә Бөйөк Октябрь революцияһы башланғас , халыҡтың яҙмышы ҡырҡа үҙгәрә. Барсынбикә һәм уның ире Диңгезхандың, Ихсанбай, Күкһылыу, Хашимдың да. Боролош йылдары уларҙы үҙ өйҙәренән ҡасып китергә, исемдәрен

алмаштырырға, хатта игеҙәк балаларының икенсе һыңарын ташлап китергә һәм уны ситтән генә ғүмер буйы күҙәтеп йәшәргә мәжбүр итә. Ә яҙмыш аяуһыҙ: үҙҙәренең бер туған икәнлеген белмәгән улы менән ҡыҙы бер–береһенә ғашиҡ була, Ихсанбайы кешелекһеҙ, уҫал ир–егет булып буй еткерә, ә Күкһылыуы кеше ғаиләһендә инсафлы ғына булып үҫһә лә , бәхеткә мандый алмай. Романдың һәр бүлеген уҡыған һайын, Фәүзиә-Барсынбикәнең аҡыллы, тәрән фекерләй белгән, көслө рухлы ҡатын итеп күрәбеҙ, уға ихтирамыбыҙ арта, хатта тормошобоҙҙа уға оҡшаған кешеләрҙе хәтерләй башлайбыҙ. Тәнҡитсе Р.Аҙнағолов уны “бөйөк ил инәһе” тип тә атай.

30-сы йылдарҙағы аяуһыҙ репрессия ла геройҙар тормошонда сағылыш таба. Роман-эпопеяның «Һандуғастың һайрар ғүмеркәйе» исемле өлөшөндә репрессия арҡаһында ике бәхетле кешенең, ике көслө заттың – Әптеләхәт менән Мәҙинәнең бәхете селпәрәмә килеүе һүрәтләнә. Уларҙан башҡа Ғәлимә, Саяф, Әйүп кеүек геройҙарға урын бирелә романдың был өлөшөндә. Әптеләхәт халыҡ дошманы тип аталып, гулаг төрмәләренә ебәрелә. Ә ҡатыны Мәҙинә, буласаҡ ҙур талант, халыҡ дошманының ҡатыны тип аталып, консерваториянан ҡыуыла. Романдан күреүебеҙсә, ҡара репрессия шәүләһе солғағанда, кешеләргә дөрөҫлөктө ярып әйтер өсөн тел тышаулы булған. Бөтә халыҡ ҡурҡыу менән бөгөнгө көн өсөн генә йәшәй. Шуныһы ғәжәп: хөкүмәт уҡымышлы кешеләрҙе төрмәгә ебәрә, ә Ихсанбай кеүек ялҡау, наҙан кешеләргә тейеүсе юҡ. Рәйес Түләктең роман хаҡындағы һүҙҙәре иҫкә төшә: «Тарих тирмәненә бойҙай бөртөктәреләй төшкән кеше яҙмыштары матурлыҡҡа һәм батырлыҡҡа һынау тота. Бәғзеһе онға әйләнә, бәғзеһе кәбәккә…».

Хатта Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла был һынау Күкһылыу, Ихсанбай, Әптеләхәт,Хашим яҙмыштарында дауам итә. Тарихта ҡалған шул осор тормошон Тирәкле ауылы кешеләренең көнкүреше, бер-береһенә мөнәсәбәте аша һынландыра автор. Ихсанбай кеүек әҙәмдәр илде дошмандарҙан һаҡлау урынына, ялған документ менән ҡалып, ауыл кешеләрен иҙеп, йонсотоп

йәшәй: һалдаттарҙың балаларын туйҙырған һыйырҙарын  тартып ала, Гөлбаныуҙың балаларын етем итә, колхозсы ҡатын–ҡыҙҙарҙы ҡыйырһыта. Ә халыҡ үҙенең һуғыштағы улдарына һуңғы көсөн йәлләмәйенсә фиҙаҡәр ярҙам итә, өҫтәүенә, намыҫһыҙ кешеләрҙең баш–баштаҡлығын да өнһөҙ күтәрә. Беҙҙең илебеҙ Бөйөк Еңеүҙе күрер өсөн ҡайһылай күп ауырлыҡтар кисергән! Романдың  «Башҡынайым ҡалды йәш кенә» бүлеген уҡығас, улар алдында беҙ ниндәй бурыслы икәнебеҙҙе ныҒыраҡ аңлайбыҙ.

Мәҙинә, Әптеләхәт, Ғәлимә, Саяф, Ҡыҙрасов кеүек геройҙар яҙмышында торғонлоҡ йылдары юйылмаҫ эҙҙәр ҡалдыра. Кешеләр Коммунистар партияһы етәкселегендә тыштан ялтырап, эстән ҡалтырап тереклек иткән,- тигән уй килә роман уҡыу барышында.  Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә замандың наҙан ҡатламы, яҙмыштарҙы ҡыйратып, кеше башын тапап юғарыға - райком, обком тирәһенә урынлашырға тырышҡан. Әҫәрҙә былар Ҡыҙрасов, Ғәлимә, Саяф Шәйхетдинов образдары аша еткерелгән. Ә күңелендә намыҫ менән бурыс тойғолары көрәшкән Әйүп Камалетдинов  ике ут араһында тороп ҡала: дуҫы булған Әптеләхәткә ярҙам итеү теләге, халыҡтың тормошон аңлау 31м партия алдындағы бурысы.

Әптеләхәт менән Мәҙинә - романда көслө шәхестәр, тормош, йәшәү, ғүмер төшөнсәләренең асылын тәрән аңлайҙар. Улар имгәнһә-имгәнә, кәмһетелһә-кәмһетелә, тик ерҙә йәшәү бурысына тап төшөрмәй.

Аҙнағолов Р. 141р хаҡында былай ти:  “Азатлыҡ өсөн яуҙар сапҡан, ҡан ҡойған, ҡорбан булған ата-бабаларыбыҙҙың быуындар сылбыры бәхетлеме? Бына ошондай һорауҙарға яуап эҙләп яҙа Таңсулпан Ғарипова роман-эпопеяһын”. Беҙҙеңсә, хоҙай тарафынан бирелгән ғүмерҙе намыҫ менән үтеү – үҙе үк бәхет. Шулай булғас, Мәҙинә, Әптеләхәт кеүек геройҙар бәхетле тип һаналырға тейеш. Әммә ни өсөн улар хаҡында уйланғанда күңелде һағышлы һәм әсенеүле тойғолар сорнай? Сөнки был геройҙар бәхетле тормошка ынтылғанда намыҫһыҙ әҙәмдәргә юлығалар. Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙҙең

илебеҙҙә үткән быуатта халыҡ менән идара итеүҙә  Ихсанбай, Саяф, Ғәлимәләр кеүек әҙәпһеҙ кешеләргә уңайлы шарттар тыуҙырылған. Шулай ҙа, хас әкиәттәгесә булмаһа ла, намыҫ менән халыҡҡа хеҙмәт иткән кешеләр еңеүсе була.

Күреүебеҙсә, егерменсе быуаттың милләт иңенә төшкән болғаныштары Фәүзиә, Гөлбаныу, Әптеләхәт, Мәҙинә ке9ек геройҙарҙың яҙмыштары аша һүрәтләнә. Яҙыусы тарихи хәл-ваҡиғалар менән кеше яҙмышының бөтөнлөгөн күрһәтә. Ул  үткән быуат хаҡында шундай дөйөмләштереүҙәр яһап, киләсәккә ҡарарға мәжбүр итә: беҙ егерме беренсе быуатта яҙмыш ҡуйған һынауҙарҙы намыҫ менән еңеп сығырбыҙмы? Шуныһы ҡыуаныслы: роман баҫылып сығыу менән үҙ уҡыусыларын тапты, Башбортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге премияһына лайыҡ булды. Яҙыусы үҙе лә роман хаҡында һөйләшеүҙәрҙә ҡатнаша, төрлө райондарҙағы конференцияларҙа әүҙем фекер алыша. Туймазы ҡалаһындағы осрашыуға ла килде һәм беҙгә ошо әңгәмә лә ҡатнашыу бәхете тейҙе. Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт, һорауҙарығыҙ булһа яуап бирергә әҙермен.